***Миләүшә ҠОЛМӨХӘМӘТОВА***

# Уҡытыусылар уҡытыусыһы



*Роберт Байымов*

Уҡытыусы, ғалим, профессор, яҙыусы Роберт Нурмөхәмәт улы Байымов тураһындағы иҫтәлектәремде студент саҡтарҙан башлап һөйләргә булдым. Мин уны беренсе тапҡыр 1974 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетының рус-башҡорт бүлегенә уҡырға килгәс күрҙем — бында ул 1968 йылда уҡыта башлаған булған. Уға тиклем «Совет Башҡортостаны» гәзитендә, «Ағиҙел» журналында сыҡҡан мәҡәләләре аша таныш инем. Уҡырға керһәм, бәлки, кәрәге тейер, тип, шул баҫмаларҙа донъя күргән әҙәбиәт ғилеме хаҡындағы мәҡәләләрҙе мәктәп йылдарында уҡ йыйып, бер папкаға туплап барғайным. Унда Роберт Байымовтан башҡа Мирас Иҙелбаев, Ғәли Сәйетбатталов, Абдрахман Ғәлләмов, Тимерғәле Ҡилмөхәмәтов, Салауат Галин, Нәғим Ишбулатов, Вәли Псәнчиндарҙың мәҡәләләре лә йыйылғайны. Был эшкә мине бер кем дә өйрәтмәне, ләкин имтихандар ваҡытында уларҙың кәрәге бик тейҙе.

Ваҡыт үтә торҙо. Беҙ ҙә беренсе курстан икенсеһенә күсеп, курс эштәре, унан һуң диплом алды, диплом эштәре яҙҙыҡ. Кемдер тел буйынса эшләне, кемдер әҙәбиәтте һайланы. Минең әҙәбиәтте һайлауыма Роберт Нурмөхәмәт улы сәбәпсе булды, тиһәм дә хата булмаҫ. Хәтеремдә, бер ваҡыт оҙон тәнәфестә уҡытыусым мине коридорҙа туҡтатты ла, кабинетына алып инде. Үҙе өҫтәл артына ултырҙы. Мине ҡаршыһына ултыртҡас, ипләп кенә саҡырыуының сәбәбен аңлатты:

— Курс эшен миндә яҙһаң, яҡшы булыр ине һиңә, телгә ҡарағанда әҙәбиәтте нығыраҡ яратаһың шикелле, — тине.

Мин:

— Телде лә, әҙәбиәтте лә тигеҙ яратам, ағай, — тип яуапланым.

Быға ҡаршы ул:

— Яҙғандарыңды уҡып барам. Һиҙенеүемсә, әҙәбиәт һине нығыраҡ тарта. Унан һуң, үҙеңдең шағирҙар тоҡомонан икәнеңде лә онотма әле, ҡан барыбер үҙенекен итә ул, — тип өҫтәп ҡуйҙы.

Мин ул ваҡытта уның һүҙҙәренә әллә ни иғтибар итмәгәнмендер, тип уйлайым, шулай ҙа:

— Ә ниндәй тема тәҡдим итмәксеһегеҙ, ағай? — тип һорай ҡуйҙым.

— Шәп тема бирәм. ЯҡташыңНоғман Мусиндың «Мәңгелек урман» романы буйынса яҙырһың, — тине.

— Ярай, — тим. Ризалаштым. Үҙем эстән генә Ноғман Мусиндың әләгеүенә ҡыуаныпмы ҡыуанам! Етмешенсе йылдарҙа Ленин урамында «Знание» тигән магазин була торғайны, хәҙер уны «Белая река» тип йөрөтәләр. Роман магазинға килеү менән барып алып, бер төндә тиерлек уҡып сыҡҡайным. Үҙем йәшәгән төйәк тураһында яҙылған булғас, уғата шатландым! Ул замандарҙа Өфөлә яңы китап сығыуы үҙе бер байрам төҫөн ала торғайны, яңы китапты сираттар тороп ала инек.

Беҙ, етмешенсе йылдар студенттары, ауылдан яңы сыҡҡан балалар, уҡытыусыларыбыҙҙы нишләптер гел «ағай», «апай» тип йөрөттөк. Улар ҙа быға үпкәләмәне, хатта төҙәтмәнеләр ҙә. Өлкәндәрсә мәҙәниәтле итеп, атаһының исемен ҡушып өндәшергә яйлап үҙебеҙ өйрәндек.

Роберт ағай профессор Ғәли Сәйетбатталов менән уғата дуҫтар ине. Ғәли Ғәлиевич беҙгә синтаксис курсынан лекциялар уҡыны. Бик ҡыҙыҡ кеше була торғайны ул: белмәгән нәмәһе юҡ. Сираттағы бер дәресебеҙҙә ул, ҙур ҡулъяулығы менән тирләгән күҙлеген һөртә-һөртә, былай тип һүҙ башланы:

— Ишеттегеҙме әле һеҙ, Роберт ағайығыҙҙың яңы китабы сыҡҡан бит. Йә, кемегеҙ күрҙе?

Башҡалар нисек ҡабул иткәндәрҙер, мин иһә шаҡ ҡаттым! Нисек инде, әҙәбиәт ғилеме уҡытҡан ҙур ғалим китап яҙып ултырһын! Был университет уҡытыусыһының эшеме? Ҡешенекен генә тикшерһә, етмәйме икән? Балаларса бер ҡатлылыҡ менән мин Роберт ағайҙы ғалим булараҡ әллә нык күтәргәнменме, әллә ихтирамым ҙур булғандырмы, ни эшләптер уны яҙыусыларҙан өҫтөн ҡуйғанмын.

Ә Ғәли Ғәлиевич һүҙен былай тип дауам итте:

— Быуа хәҙер әйтеп ҡараһындар инде, кеше әҫәрен тикшерә, ә үҙе яҙа белмәй, тип! Робертҡа мин гел әйтә килдем, танауҙарына сирт шуларҙың, тип. Вәт маладис! Күрһәттеме кемлеген? Күрһәтте!

Үҙе хәйләкәр йылмайып, йә, ни әйтерһегеҙ хәҙер, тигәндәй, беҙгә ҡарай.

Шунда Айрат Абзалов булды шикелле, хуплауын белдереп ниҙер өҫтәгәйне, быға яуап итеп Ғәли Ғәлиевич:

— То-то! Әҙәбиәт ғилеме белгесе генә түгел хәҙер ағайығыҙ, ә яҙыусы-прозаик, ғалим-яҙыусы! Таныттымы кемлеген? Таныты. Математиктар шулай була ул! Тик ҡотларға онотмағыҙ! — тип һүҙен тамамлағанын белгертте.

Быныһы ла мине шаҡ ҡатырҙы!Баҡһаң, Ғәли Ғәлиевич әйтеүенсә, Роберт Байымов мәктәпте тамамлағандан һуң өс йыл рәттән мәктәптә физика һәм математика уҡытҡан икән, хатта армиянан һуң Стәрлетамаҡ пединститутының физика-математика факультетына уҡырға ла ингән булған. Булһа була бит аҡыллы кешеләр, тамам иҫем китте! Үҙемә ҡалһа, математика иң зирәк аҡыллы һәм үткер аналитик фекерләүгә оҫта кешеләр эше — килеп тороп шундай факультетҡа уҡырға ин әле! Ғәләмәт башлылыр был ағай, тип уйла-йым! Әлеге хәбәр уҡытыусыбыҙҙың легендар образын тағы ла бер баҫҡысҡа үҫтереп ебәргәндәй булды. Бына шундай мәғлүмәтле кеше ине Ғәли Ғәлиевич Сәйетбатталов, дәрестәрҙе университет, Өфө тормошондағы яңылыҡтарҙан башлап ебәрһә, байтаҡ мәғлүмәтте башлап унан ишеттек. Был юлы ла унан ишетмәһәк, Роберт ағайҙың китабы сыҡҡанын, бәлки, һуңлап белер инек. Ифрат баҫалҡы ине шул уҡытыусыбыҙ!

Роберт Байымов Өфөгә яҡын ғына Ҡырмыҫҡалы районы Үтәгән ауылында тыуып үҫкән ғалим. Яратҡан әҙиптәрем Шәриф Биҡкол, Ғайса Хөсәйенов, Тимерғәле Ҡилмөхәмәтов, шағир Ирек Ҡинйәбулатовты биргән гүзәл яҡтар бит ул! Бер төбәктән генә күпме талант сыҡҡан, һоҡланмаҫ ереңдән һоҡланырһың, ә бит ҡайһы яҡта улар бармаҡ менән һанарлыҡ ҡына була. Уҡытыусыбыҙ 1965—1968 йылдарҙа Мәскәүҙә аспирантурала уҡыған, университетта иһә 1968 йылда эшләй башлаған. 1963 йылдан башлап әҙәби тәнҡит менән шөғөлләнгән. Беҙҙең курс университетты 1979 йылда тамамланы. Роберт Байымовты 1981 йылда башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы мөдире итеп тәғәйенләйҙәр, ә 1982 йылда ул Мәскәү дәүләт университетында докторлыҡ диссертацияһы яҡлай, 1984 йылда иһә профессор дәрәжәһе ала. Быларҙың барыһы хаҡында ла матбуғаттан уҡып белһәм дә, Өфөгә бер килгәндә «Үҙәк баҙар» туҡталышында осраған яҡшы хәтерле уҡытыусыбыҙ Ғәли ағай Сәйетбатталовтан тағы ла бер ҡат ишетеп ҡыуанғайным.

Етмешенсе йылдарҙа филология факультеты студенттары гөрләп тора ине: апрелдә «Яҙғы моңдар», октябрҙә — «Көҙгө моңдар» шиғыр кисәләре ойошторола торғайны. Дан итеп уҙғарылған бындай кисәләрҙә Роберт Байымов, «Шоңҡар» әҙәби түңәрәген етәкләүсе яҙыусы Тимерғәле Ҡилмөхәмәтов һәм башҡа уҡытыусыларыбыҙ ҙа ситтә ҡалмай, башта улар байрам менән ҡотлап телмәр тота. Йәмле байрамға үҙебеҙҙең факультет студенттары ғына түгел, педагогия, авиация, ауыл хужалығы институттарынан да киләләр. Яҙыусылар Зәйнәб Биишева, Ғәйнан Әмири, Ҡирәй Мәргән, Фәрит Исәнғолов, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рафаэль Сафин, Яҡуп Ҡолмой, Ғилемдар Рамазанов, Хәким Ғиләжев, Әмир Чаныш, Ғабдулла Байбурин, Ибраһим Абдуллин, Рауил Бикбаев, Рәми Ғарипов, Сафуан Әлибаев, Тимер Йосопов, Тимер Арыҫлан, Рауил Ниғмәтуллиндар, йырсылар Нажиә Аллаярова, Ғүмәр Әбделмәнов, Илфак Смаков, яҡташым Венер Ҡилмөхәмәтов, Рамазан Йәнбәков, бейеүселәр Рауилә Хажиева, Рәшиҙә Туйсиналарҙың сығыштарын ҡыуанып ҡаршылайбыҙ, алҡышлап оҙатабыҙ. Уларҙы үтә лә һағынып, көтөп ала торғайныҡ! Рухиәтте үҫтереүсе, саф тойғолар бүләк итеүсе был байрамдарҙы әле булһа йылы итеп иҫкә алам, шул саҡтарҙа, моғайын, беҙҙән дә бәхетле кеше булмағандыр! Курсташым Рәмилә Исәнғолова менән «Знание» магазинынан исемдәре алда һанап кителгән әҙиптәрҙең китаптарын барып алабыҙ ҙа, уларҙы студенттарға һатҡас, аҡсаһын магазинға алып барып тапшырабыҙ. Барыһы ла шатланып яҙыусыларҙан автографтар ала — шунан да ҙур шатлыҡ юҡ! Кисәлә ихлас ҡатнашыусы башҡа факультеттарҙан килгән студенттар ҙа яҙыусылар менән күрешә, рәхәтләнеп аралаша, автографтар ала торғайны. Шул замандарҙағы иҫтәлекле китаптарҙы бөгөн улар ҙа ҡәҙерләп һаҡлайҙыр, тип уйлайым.

«Мәңгелек урман»ды ҡабаттан уҡып сыҡҡас, бер көндө дәрестәрҙән һуң Роберт ағай янына инеп консультация алырға булдым. Ул минән романдың оҡшауы-оҡшамауын, ниндәй образдарҙың, геройҙарҙың күңелемә ятыуын, әҫәрҙә күтәрелгән проблемаларҙы нисек аңлауымды һорашты. Романдың теленә лә туҡталды: тик юрматы башҡорттарына ғына хас ҡайһы бер һүҙҙәрҙең варианттарын, мәғәнәләрен һораны. Шулай ун биш минуттай әңгәмәләшеп ултырҙыҡ. Минеңсә, Роберт Нурмөхәмәт улы курс эше яҙыр алдынан минең белемемде, яуаплылығымды асыҡларға тырышҡандыр, тим, телгә иғтибарлымынмы, юҡмы, ә бәлки, тел буйынса китергә тейешмендер — шуны ла белергә теләгәндер. Етәксе өсөн был да үҙенә күрә кәрәк эш бит, ә бәлки, үҙендә курс эше яҙасаҡ студентының әлеге әҫәр буйынса эшләрлек икәнлегенә ышанырға, артабан да

үҙенә диплом алды, диплом эштәре яҙыуымды теләгәндер. Ҡурс эше, диплом алды, диплом эштәре, мәғлүм булыуынса, студенттарҙың ижади һәләттәрен үҫтерергә ярҙам итә, шул ваҡыттарҙа ҡанаттар нығына, үҙ-үҙенә ышанысы арта. Ә университетты тамамлағандан һуң һәр кем үҙ юлын һайлай: кемдер мәктәпкә китә, кемдер фән юлын һайлай, кемдер журналистика һөнәрен үҙ итә. Беҙ уҡыған йылдарҙа факультетта журналистика бүлеге булманы, журналистар, яҙыусылар «Шоңҡар» әҙәби-ижад түңәрәгенән үҫеп сыға торғайны.

Бишенсе курсҡа килеп еткәс, мин дә Р.Байымовта диплом эше яҙҙым, темаһы — «Ноғман Мусиндың «Мәңгелек урман» романында тәбиғәтте һаҡлау проблемаһы» (исеме шулай иҫтә ҡалған) тип атала ине. Ул замандарҙа бөгөнгө кеҮек кеҫә телефондары, компьютерҙар ҙа булманы, барыһы ла ҡул менән эшләнде. Тик диплом эшен генә, машинистка табып, түләп баҫтырып, төпләтеп алырға кәрәк ине.

Роберт ағай, эшемде оҡшатһа ла, барған һайын ниндәйҙер етешһеҙ урындарын табып, төҙәткеләп ҡайтара торғайны. «Бына ошо ерен яңынан эшлә, бына бынау еренә миҫал, диалог йәки өҙөк алырға кәрәк, быныһын һыҙып ташла», — тигәнерәк кәңәштәр бирә. Мин үҙем сабыр холоҡло кешемен. Уҡытыусым да шулай. Әйткәндәрен тыныс ҡына үтәгәс, уҡытыусым ҡәнәғәт ҡала, эш араһында:

— Университетты бөткәс, юғалма, артабан да бергә эшләрбеҙ, һинән толк сығасаҡ, ҡыҙыҡай, — тип өҫтәй. Ҡайҙа эшкә барыуымды ла һорашырға онотмай. Мин: «Телевидениеға барам», — тигәс: «Телевидениеның эше күп ул, эшкә күмелеп уҡыуҙы, яҙышыуҙы ташлама. Һәләттәреңде үҫтер, һин шағирҙар тоҡомонан бит әле, — тип шаяртып көлә. — «Шоңҡар»ҙағы яҙмаларыңды уҡып барам. Күңелең матур, хислеһең, телең һәйбәт, яҙыш, — тигән фатихаһын бирә. — Берәү ҙә тыумыштан белеп тыумай, кеше йәшәй-йәшәй өйрәнә, яҙа-яҙа шымара». Үҙе һөйләй, үҙе хәйләкәр йылмая. Минең фамилиямдан оялыуымды, «шағир тоҡомонан» тигән һүҙҙәрен ишетергә теләмәгәнемде белә бит инде ул, ә шулай ҙа семтей. Их, шул һүҙҙәрҙе әйтмәһә генә ярар ине, тип тора инем бит инде! Ҡолмөхәмәтова фамилияһынан оялам, тигәс тә, уны икенсе төрлө аңларға ярамай: фамилияма үтә лә яуаплы ҡарағандан, уны тик яҡшы менән матурларға теләгәндән генә ояла инем мин, берәй яңылышлыҡ эшләп ҡуйып, ата-әсәйем, туғандарымдың битен ҡыҙартмайым, тип ҡурҡа инем. Ләкин Роберт ағай фамилияма йыш төрттөрмәне, булһа, ике-өс мәртәбә ҡабатлағандыр. Шулары ла миңә ғүмерлек һабаҡ булды!

Роберт Нурмөхәмәт улы менән аралаша башлағас, бер ваҡыт балалыҡ бер ҡатлылығы менән тағы ла:

— Ағай, нишләп һеҙҙең исемегеҙ башҡортса түгел ул? — тип һорағанымды ла хәтерләйем. Нишләп бөтә башҡорттарҙың да исеме башҡортса булырға тейеш, тип уйлағанмындыр инде? Ул иһә кеткелдәп көлдө лә:

— Шулай тип ҡушҡандар инде. Исемде бала һайламай бит, — тип ҡуйҙы. Берәү булһа, бәлки, шелтәләр ине. Ә Роберт ағай ундай кеше түгел. Бая әйткәнемсә, тыныс холоҡло, ипле, тотанаҡлы кеше. Һөйкөмлө, изге күңелле, шаян телле. Уның бер ваҡытта ла ҡараңғы йөҙ менән йөрөгәнен, ҡысҡырып көлгәнен, кемделер йәмһеҙ итеп һөйләгәнен хәтерләмәйем. Йөҙөндә һәр саҡ алсаҡ йылмайыу булыр. Һәр ваҡыт ыҫпай, бөхтә йөрөй, үҙ-үҙен тотошо, һөйләшеүе, хатта хәрәкәттәренә тиклем ысын интеллигент икәнлеге күренеп тора. Студент саҡтан башлап уҡытыусымдың сал сәстәрен дә күргәнем булманы. Хәйер, был хаҡта ла айырым һөйләп китәйем.

Һуңғы тапҡыр беҙ 2010 йылдың февраль тирәләрендә осраштыҡ. Унда ла ағайыбыҙҙың аҡ сәстәре асыҡ ҡуңыр төҫтә ине булһа кәрәк. Был юлы һүҙҙе мин башланым:

— Роберт ағай, нишләп һеҙҙең бер ваҡытта ла сәстәрегеҙ ағармай ул? Һеҙ бер ҙә ҡартаймайһығыҙ? — тип һораным.

— Бәй, һин дә буяғанһың дабаһа! Сәбәбе бер инде! — тип көлөп ебәрҙе.

Ысынлап та, үҙемдең сәстәрем ағара башламайынса, уҡытыусымдың аҡ сәстәрен буяғанын белмәй йөрөгәнменсе! Әллә аҡ сәстәрен күрмәгәнгә гел йәш итеп ҡабул иттемме икән? Икәүләшеп рәхәтләнеп көлөпмө көлөштөк!

— Үҙең дә бер ҙә студенткаларҙан бер яғың менән дә айырылмайһың, — тип шаяртыуын дауам итте Роберт ағай. — Мин әле һине берәй аспиранткам килгән икән, тип уйлағайным әле!

Тормош иптәшем прокурор булып эшләү сәбәпле, беҙҙең ғаилә гел бер урындан икенсе урынға күсенеп йөрөнө. Мин быға тиклем дә Өфөлә булған саҡтарымда, йылыға йылан эйәләшә тигәндәй, университетҡа һуғылмай китмәй торғайным. Роберт Нурмөхәмәт улы һәм үҙемде уҡытҡан башҡа уҡытыусыларым янына инеп сығам, хәлдәрен һорашам. Шундай ҡабалан ғына осрашыу минуттарында ла ул көттөрөп яфаламай, ваҡыты булһа: «Әйҙә, студентка, уҙ», — тип шаяртып, кабинетына саҡырып ала. Матбуғатта донъя күргән мәҡәләләремде уҡып барыуын, хуплауын әйтә, ҙурыраҡ әйберҙәргә тотонорға кәрәк ине һиңә, тип кәңәш бирә, донъя хәлдәрен һораша. Игеҙәк балаларыбыҙ хаҡында ла һорашырға онотмай. Һөйләгәндәремде диҡҡәт менән тыңлай. Беҙҙең һөйләшеү гел ҡәҙимге бер теләк менән тамамлана торғайны: Роберт Нурмөхәмәт улы минең үҙенә беркетелеп, кандидатлыҡ диссертацияһы яҙыуымды теләй. Әле лә һуң түгел, тип дәртләндерә. Методика буйынса китһәң дә, әҙәбиәт буйынса эшләһәң дә булдырырһың, һинең ҡулыңдан килә, тағы ла бер егерме йыл рәхәтләнеп эшләрлек ваҡытың бар әле, тип күңелде үҫтерә. Бына шундай ғәжәп үҙенсәлекле, иғтибарлы кеше ине ул!

Тағы ла бер яҡшы яғын билдәләп китәм уҡытыусымдың: Роберт Нурмөхәмәт улы юғары аралашыу мәҙәниәтенә эйә шәхес ине. Ошо яғы менән ул барыһына ла үрнәк булғандыр. Ул бер ваҡытта ла кеше күңелен китмәй, бәйләнмәй, аҡыллы кәңәштәрен дә бирә белә — былар барыһы етәксе кеше өсөн бик һәйбәт һыҙаттар. Уҡытыусым янына инеп-сыҡҡан арала ғына уның студенттар, университет уҡытыусылары менән һөйләшкәнен дә күп тапҡыр күргәнем, ишеткәнем булды. Тик бер ваҡытта ла ҡыҙып киткәнен, кешегә иғтибарһыҙ ҡалғанын, тауыш күтәргәнен күргәнем булманы. Уның менән аралашыуы еңел була торғайны. Ҡеше йәнле кеше ине ул: студентмы, профессормы йәки ябай хеҙмәт кешеһеме, хөрмәт менән, тиң күреп һөйләшә. Үҙенән түбән ҡуймай, кәңәштәрен дә көсләп таҡмай, үҙ иркенә ҡуйып, бары йүнәлеш кенә бирә.

Алда телгә алынған «толк» һүҙенең мәғәнәһенә лә бер ни тиклем асыҡлыҡ индереп китәйем. Яҙмыш мине Сибай тарафтарына ташлағас, ошо ҡалала өй беренсә йөрөп балалар йыйып алып, 1-се һанлы урта мәктәптә башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡыта башлағас, 1988 йылда республика күләмендә беренсе тапҡыр Башҡорт дәүләт университетының акт залында туған телдәр уҡытыу буйынса уҙғарылған беренсе өлкә конференцияһында Сибай ҡалаһы вәкиле булараҡ сығыш яһарға тура килде. Ундағы хәлдәрҙе һөйләп, илап төшөп киткәс, конференциянан һуң Роберт ағай, яныма килеп, арҡамдан һөйҙө лә:

— Күңелеңде төшөрмә, Миләүшә, шулай янып-көйөп башҡорт телен уҡытып йөрөүеңә бик шатбыҙ, бирешмә, — тип йыуатты. — Эшләй тора тәжрибәң дә артыр. Давай, диссертация яҙ! Хәтерләйһеңме, студент саҡта уҡ, һинән «толк» сыға, тигәйнем? Халыҡҡа һинең кеүек туған тел өсөн янып торған маяҡ булырҙай уҡытыусылар бик-бик кәрәк! Давай, һуҙма: әҙәбиәтте һайлайһыңмы, тел буйынса китәһеңме, аспирантураға ин! Миңә беркетелһәң, әҙәбиәт буйынса шөғөлләнерһең. Теләһәң, әҙәбиәт уҡытыу методикаһы буйынса кит: ике юл бар, бер теләк, — тине. Сибайға ҡайтҡас, был турала иремә һөйләгәйнем, ул да шатланды, тик: — Хәлеңдән килерме, һиңә бит, балаларҙы ташлап, Өфөгә йөрөргә тура киләсәк, — тип яуапланы. Быны ишетеү миңә бик ауыр булды. Ысынлап та, ирем көнө-төнө хөкүмәт эшендә саба, ә ғаиләне, балаларҙы ҡарау, мәктәп эше — барыһы ла минең елкәлә булды. Балаларҙы әсәйемә ҡалдырыр инем, улар Ишембай районында йәшәй. Ҡыҫҡаһы, хыялымды миңә мәле еткәнсе ҡалдырып торорға тура килде. Шулай ҙа Роберт ағайҙың да һүҙҙәрен онотманым, уҡытыусым да мине күҙ уңынан ысҡындырманы. Осрашҡанда гел хәлемде һорашып, уҡырға дәртләндереп тороуына әле лә рәхмәтлемен! Әгәр ҙә шул йылдарҙа башҡа факультет уҡытыусылары ла, айырыуса тел, әҙәбиәт ғалимдары студенттарға шулай йүнәлеш биреп торһа, бөгөн оло быуын ғалимдары урынына йәштәр килгән булыр, башҡорт теле һәм әҙәбиәте фәндәре бөгөнгөләй ғалимдарға ҡытлыҡ кисермәҫ ине. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен фән булараҡ тикшергән ғалимдарыбыҙ бер-бер артлы донъянан китеп бөтөп бара, ә тотоп алып эшләрлек кеше ҡалманы тиерлек — ултырып иларлыҡ хәл бит был!

Бәхеткә ҡаршы, был һүҙҙәр Роберт Байымов ағайға ҡағылмай: киң эрудициялы һәм рухи багажлы, алдан күрә белеүсе ғалим-уҡытыусы бер үҙе генә лә өс тиҫтәнән ашыу кешене фән юлына сығарған — быны өсөн ул күпме көс, хеҙмәт түккән! Ғалимлыҡ уның үҙенә лә тәбиғәттән һалынған булғандыр, юғиһә, ғалим кешегә ултыраҡлыҡ, түҙемлек, баш баҫып эшләй белеү, сағыштырыу, алдан һиҙемләү, төбөнә төшөп тикшереү һәм кешегә аңлата һәм үҙең аңлағанды кеше аңларлыҡ итеп яҙа, уҡығаныңды анализлай белеү, архив материалдары һәм ҡулъяҙмалар өйрәнеү, дөйөмләштерә белеү, теге йәки был проблема хаҡында даими уйланып йөрөп, ҡулыңдан ручкаңды төшөрмәү кәрәк. Боронғолар: «Уҡыу — энә менән ҡойо ҡаҙыу», — тип белмәй әйтмәгән бит инде, ошо мәҡәлгә тоғро ғалим үҙе белгәнде уҡыусыларына ла һеңдергәндер.

Сибайҙа һигеҙ йыл башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытҡандан һуң, ғаиләбеҙ Өфөгә күсеп килгәс тә осрашып торҙоҡ уҡытыусым менән. Өфө башҡорт балаһын ҡосаҡ йәйеп көтөп тормай, быны ауылдан килгән һәр беребеҙ яҡшы белә. Беҙҙең ғаиләгә лә ул битен тик 1992 йылда ғына асты. Мин иһә килеү менән баш ҡаланың Калинин районына ҡараған Шаҡша биҫтәһендә 122-се һанлы рус мәктәбенә эшкә урынлашып, микрорайон буйлап йөрөп балалар йыйып алып, башҡорт кластары асып эшләй башланым. Төшкә тиклем беренсе «Е», төштән һуң икенсе «Е»-ла уҡытам, ике класта ла класс етәксеһемен. Уларҙы бишенсегә тиклем еткергәс, тағы ла биш йыл 20-се һанлы Өфө ҡала башҡорт гимназияһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләп, ҙур тәжрибә тупланым. Сибайҙа башҡорт, рус теле уҡытыусыларының ҡала конкурсында (1987), Стәрлетамаҡта уҙғарылған Башҡортостан мәҙәниәте һәм тарихы предметы уҡытыусыларының республика конкурсында (1991), төбәкара «Йыл уҡытыусыһы» конкурсында (1996) ике тапҡыр еңеүсе һәм лауреат булдым, «Өлкән уҡытыусы», «Башҡортостандың мәғариф отличнигы» тигән

исемдәр алдым. Баш ҡаланың Орджоникидзе районы РОНО-һында туған телдәр методисы булып эшләү менән бер рәттән 48-се башҡорт лицейында, артабан Өфө ҡалаһы мәғариф идаралығында туған телдәр буйынса методист итеп тәғәйенләнгәс, ошо районға ҡараған 64-се ҡала гимназияһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен уҡыттым. Шулай итеп, мин мәктәптә ун туғыҙ йыл эшләп ташланым, ләкин бер ваҡытта ла яҙышыуымды ташламаным. Шуларҙың барыһын да уҡытыусым ишетеп тә, гәзиттәрҙә сыҡҡан мәҡәләләрем аша уҡып-күҙәтеп тә барған икән, осрашҡанда ул «давай, хәҙер ғилми эшкә тотон, хәҙер һин Өфөләһең», тиер ине. Ниһайәт, ҡолаҡҡа элдем шикелле, ярты йыл эсендә немец телен өйрәнеп, философия фәнен уҡып, аспирантураға имтихандар тапшырҙым. Етәксем Роберт Нурмөхәмәт улы булды, миңә оҡшаған тема ла табылды. Тик башҡорт телен уҡытыу, методик ҡулланмалар яҙып, нәшер итеү был юлы ла миңә ҡамасаулыҡ итте — бер сиктән икенсе сиккә тайпылыу килешмәй ҙә бит! Үҙемә ҡалһа, икеһе лә ҡәҙерле: әҙәбиәт тә, әҙәбиәт һәм тел уҡытыу методикаһы ла. Профессор Мирас Иҙелбаевҡа кәңәшкә ингәйнем, ул бишенсе—етенсе кластар өсөн баҫтырылған «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса нәшер ителгән методик ҡулланмалар»ымды күрҙе лә: «Бәй, ошо ике китабың ғына ла үҙе бер диссертациялыҡ бит», — тип дәртләндергәс, әллә методиканан ғына яҙайыммы икән, тип уҡталһам да, методика буйынса Мәскәүҙә яҡларға кәрәклеген белгәс, күңелем һүрелде. Унда барырға аҡсаһы кәрәк, ә эш хаҡым бик бәләкәй, етмәһә, ике балам да студент.

Шулай ҙа 2004 йылда мәғарифтан журналистикаға китергә үҙемдә көс таптым: «Һәнәк» журналында эшләй башланым. Быға барыһы ла «аһ» итте, әлбиттә, «Һин юморист түгелһең дә инде, нисек һине эшкә алдылар ул?» — тип аптыраусылар ҙа булды. Мине иһә бер өйрәнелгән эштән икенсеһенә күсеп, яңынан тотоноуы бер ваҡытта ла ҡурҡытманы, киреһенсә, бер урында тапанғансы, яңыһын үҙләштереүгә илһамланып тотона торғайным. Был юлы ла шулай булды. Баҫмаға «Һәнәк»тең баш мөхәррире Марсель Сәлимов саҡырыуы буйынса килдем. Бер йыл фельетон бүлеге редакторы булып эшләгәндән һуң яуаплы секретарь итеп тәғәйенләндем. Унда ла һынатманым. Баҫманың документацияһы, Мәскәү менән килешеүҙәр, тираж буйынса эшләү — барыһы ла минең өҫтә булды. Мин эшләгән йылдарҙа «Һәнәк»кә хаттар күп килә ине. Ҡала мәғарифын биш бармағым кеүек белгәнгә күрә, мәктәптәрҙә күңелле осрашыуҙар ойоштора, рус һәм башҡорт телдәрендә «Сәнскәк» — «Ҡолючка» биттәрен алып барам. Унда әҫәрҙәре баҫылған йәш сатириктар араһында төрлө конкурстар ойошторабыҙ, араларында үҙен журналистика һөнәренә арнаусылар ҙа табылды — улар өсөн университеттың журналистика бүлегенә рекомендациялар әҙерләй торғайным. Былар хаҡында ла Роберт ағай ишетеп-белеп, осрашҡанда сатира һәм юмор буйынса кәңәш биреп торҙо.

Хәҙер инде мин «Башҡорт әҙәбиәтендә сатира һәм юмор» тигән темаға диссертация яҙа башланым, элекке темам төшөп ҡалды. Бар ваҡытым «Һәнәк» тарихын, башҡорт сатириктарының әҫәрҙәрен, рус тәнҡитселәренең ғилми эштәрен өйрәнеүгә китте, бөтә ялдарым, буш ваҡыттарым, отпускыларым Зәки Вәлиди китапханаһында үтте. Тик был юлы ла бер ҡаршылыҡ килеп сыҡты: күрәһең, миңә диссертация яҡлау насип булмағандыр. Ә хәл былай булды. Бер ваҡыт ниндәйҙер йомош менән университетҡа барғайным, журналистика бүлегенең кафедра мөдире Тимерғәле Ҡилмөхәмәтов ағай осраны. Ниңә килгәнемде һөйләп биргәйнем, ул да үҙенә ҡоҙаланы. «Һин бит

журналист, әйҙә, журналистика буйынса яҙ, — ти, — тик оҙаҡҡа һуҙма». Ризалаштым. Роберт ағайға был турала әйткәс, бик ныҡ үпкәләне. Шулай ҙа сәбәбен һораштты. Мин: «Башҡорт әҙәбиәтендә быға тиклем эшләнелмәгән сатира һәм юмор жанрын журналистика менән үрелдереп алып барыу өсөн шулай хәл иттем», — тип яуаплағас, йөҙө яҡтырҙы. «Тик алдан белеп ҡуй: журналистика кафедраһында журналистика буйынса диссертация яҡлау мәсьәләһе һаман да хәл ителмәгән, — тине, — ниндәйҙер икенсе ҡалала яҡларға тура киләсәк». Шунда ғына мин хаталаныуымды аңланым һәм яңынан Роберт ағайға әйләнеп ҡайттым. Тәүге эшем яҙылды, әлбиттә. Тик аяуһыҙ ваҡыт арабыҙҙан уҡытыусыбыҙҙы иртәрәк йолоп алды. 2010 йылдың февраль-марттарында бер нисә тапҡыр осрашҡандан һуң беҙгә ҡабаттан күрешергә насип булманы. Икенсе йылына мин дә сит илгә сығып киттем. Әлеге яҙмамды ла үҙемдең сығып китеүемә һәм уҡытыусымдың мәрхүменә теп-теүәл биш йыл тулғанда яҙам. Кем шулай булырын уйлаған?..

Тәрән йылға тын аға, ти. Р.Байымов тәрән эрудициялы ғалим-уҡытыусы ине, уҡытыусыларҙың уҡытыусыһы! Уның ғилми даирәһенең киңлегенә, уны ҡыҙыҡһындырған мәсьәләләрҙең әҙәбиәт донъяһы менән генә сикләнмәүенә хайран ҡалырлыҡ! Иртәрәк китһә лә, ғалим булараҡ, тауҙай ғилми эштәр, китаптар, башҡорт филологияһында ҙур мәктәп тыуҙырып, өс тиҫтәнән ашыу ғалим-шәкерттәрен ҡалдырҙы. Тик ысын уҡытыусы ғына шулай эшләй ала: әгәр уҡыусыларың юҡ икән, ғалим исеме күтәреүеңдән ни мәғәнә?!

Р.Байымовтың ҙур тырышлыҡ менән яулаған дәрәжәләренә хатта көнләшерлек тә: БР Фәндәр Академияһының почетлы академигы, Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы тигән маҡтаулы исемдәре бар, өс тиҫтәнән ашыу фән кандидаттары әҙерләгән, киң күләмле «Сарсау» (1980), «Бикле хазина» (1982), «Ҡайтырбыҙ һалдат булып», «Һуңлаған моң», «Ҡарауан Бағдадтан килә», «Сыбар шоңҡар», «Үс», «Йәшерелгән хазина» (1986) исемле әҫәрҙәр ижад иткән, «Башҡорт тарихи-революцион романы» (1980), «Башҡорт прозаһының эпик система формаһында роман жанры» (1982) һәм башҡа төплө фәнни хеҙмәттәр, 500-ҙән ашыу фәнни мәҡәлә, 40-ҡа яҡын китап һәм монографиялар яҙып ҡалдырған. Бынан тыш, Роберт Нурмөхәмәт улы «Башҡорт Энциклопедияһы»ның фәнни-редакцион советы ағзаһы, дәреслектәр, юғары уҡыу йорттары һәм мәктәптәр өсөн методик ҡулланмалар, «XX быуат башҡорт әҙәбиәте» (2003), «Ҡөнсығыштың бөйөк йөҙө һәм әҙәби ҡомартҡылары» (2006) тигән фундаменталь хеҙмәттәр авторы ла, алты томдан торған «Башҡорт әҙәбиәте тарихы» ла туранан-тура уның ҡатнашлығы һәм тырышлығы менән нәшер ителгән. Ғалим-әҙиптең тәнҡит мәҡәләләре иһә үҙе бер донъя! Күп яҡлы, күп жанрлы бихисап хеҙмәттәре әллә нисәмә тиҫтә йылдар башҡорт әҙәбиәтенең, бигерәк тә әҙәбиәт ғилеменең йөҙөн, иң юғары ҡаҙаныштарын билдәләй. Миненсә, әҙип-ғалимдың үҙенең хеҙмәттәрен генә жанр буйынса тикшерә китһәң, оҙон бер исемлекте тәшкил итер ине: монография, теория, әҙәбиәт тарихы, әҙәби тәнҡит, әҙәбиәт ғилеме, хикәйә, повесть, роман, тарихи роман, ижади портрет, очерк һәм башҡалар — былар барыһы ла башҡорт филологияһында киләһе быуындар файҙаланасаҡ ҡиммәтле хазина! Киң ҡоласлы ғалимдың хеҙмәттәрен киләсәктә үҙе уҡытҡан шәкерттәре ғилми яҡтан тикшереп, халыҡҡа таратыр, тигән изге уйҙа ҡалайыҡ.

Р.Байымовтың әҫәрҙәре рус телле уҡыусыларға ла барып етте: «Сыбар шоңҡар» романы рус теленә тәржемә ителгәндән һуң уға БР-ҙың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы тапшырылды. Хәйер, роман хаҡында ла ҡыҫҡаса әйтеп китәйек — үҙ ваҡытында башҡорт әҙәбиәте тарихында ул ҙур ваҡиға булараҡ ҡабул ителгәйне. Әҫәрҙә автор Зәки Вәлидиҙең үҙен аямайынса халҡына азатлыҡ яулау эшмәкәрлеген тасуирлай, бының өсөн ҙур тарихи сығанаҡтарҙы аҡтара, тарихи дөрөҫлөктө өйрәнә. Вәлидиҙең, төрки халыҡтарын тик берҙәмлек кенә баҫҡынсыларға ҡаршы тора алыуға килтерәсәк, тигән фекерен яҡлай һәм быға ул Рәсәй дәүләтенең тарихын өйрәнеү һөҙөмтәһендә ирешә. Зәки Вәлидиҙең азатлыҡ яулау маҡсаты большевиктар юлы менән тап килмәгәс, ул ҡулға ҡорал алып көрәшеү маҡсатын ҡуя. Ошондай ауыр шарттарҙа уның янында Шәйехзада Бабич, Муса Мортазин да көрәшә — был образдарҙы яҙыусы ҡыҙыҡлы сюжет һыҙыҡтары аша һүрәтләй. Ләкин башҡорт ғәскәре еңелеүгә осрай — әҫәрҙең ошо өлөшөн Р.Байымов иҫ киткес ҙур оҫталыҡ менән һүрәтләп бирә: романда башҡорт халҡы күргән ауырлыҡ һәм «оло ағай»ҙың вәхшилектәре бөтә тулылығында тасуирлана — бының менән автор Башҡортостандың хәҙерге үҙаллылығын быуып ташларға әҙер тороуҙары хаҡында ла иҫкәртергә теләй. Федераль үҙәктең субъекттарҙың эске эштәренә тығылыу сәйәсәте алып барыуы, тик үҙенә генә уңайлы эштәр башҡарыуы ошоға дәлил. Тарихты тасуирлағанда яҙыусы һәр ҡаршылыҡҡа үҙ баһаһын бирә: ҙур ауырлыҡтар менән яуланған азатлыҡтың Ленин, Сталин тарафынан юҡҡа сығарылыуын айырыуса әсенеүле картиналарҙа һүрәтләй — роман һуңында Зәки Вәлидиҙең сит илгә сығып китеүен бёләбеҙ — былай ул төрки халыҡтарын берләштереүгә тарих яҙыу аша алып бара аласаҡ. Шулай итеп, романда сағылдырылған осор һәм ундағы хәл-ваҡиғалар һәм тарихи дөрөҫлөк бөгөн дә әһәмиәтле булып ҡала — яҙыусы Роберт Байымов башҡорт халҡының ысын тарихын уҡыусыға ғәҙел еткереүҙә ҙур көс түккән.

Ҙур тормош тәжрибәһе, энциклопедик белем туплаған уҡытыусы-ғалим һәм яҙыусы Р.Байымов «Йәдкәр» (хәҙер ул «Проблемы Востоковедения» тип атала) исемле фәнни-публицистик журналдың тәүге мөхәррире лә булды. Ғүмеренең һуңғы йылдарында ул аҙ өйрәнелгән төрки, ғәрәп, фарсы телдәре һәм әҙәбиәте проблемалары менән шөғөлләндe, шуның һөҙөмтәһендә «Көнсығыштың бөйөк йөҙө һәм әҙәби ҡомарҡылары» монографияһын яҙҙы. Башҡортостан Мәғариф министрлығы был китапты юғары баһалап, уны юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн дәреслек итеп файҙаланыу тәҡдиме менән сығыш яһаны, ә «Башҡортостан» гәзите «Йыл китабы» тип таныны.

Әгәр халыҡ үҙенең ғалимын онотмай икән, тимәк, ул йәшәй. Әгәр ғалимдың эшен дауам итеүсе уҡыусылары, шәкерттәре ҡалған икән, уның исеме мәңге онотолмаясаҡ. Яҡшы кешенең исеме бер ваҡытта ла онотолмай. Уҡытыусым — өлкән дуҫым Роберт Нурмөхәмәт улы әле лә иҫән төҫлө, уның донъяла булмауына күңел ышанмай. Университетҡа килһәң, элеккесә йылмайып ҡаршылар, «һаман да студентка һымаҡһың», тип шаяртыр төҫлө.

Беҙ, Роберт Нурмөхәмәт улы Байымовта белем алған филология факультеты студенттары, хәҙер үҙебеҙ ҙә алтмышҡа етеп киләбеҙ, ләкин күңелдәрҙә яҡты эҙ ҡалдырған уҡытыусыбыҙҙы бер ҡасан да онотмайбыҙ. Курсташтарым, төркөмдәштәремдең иң йылы хис-тойғолары һәм ихтирамы ошо иҫтәлектә лә яҡшы сағылалыр, тип уйлайым.